# ШАРТТАР БУЛҺА, ЭШ ТӘ БАРА

*Валерий ҒҒЙНЕТДИНОВ*

Башҡортостанда бөгөн бәләкәй эшҡыуарлыҡ өлкәһендә халыҡтың ун бер проценты эшләй. Ә дөйөм алғанда, республика халҡының өстән бер өлөшө самаһының эшҡыуарлыҡҡа мөнәсәбәте бар. Бәләкәй предприятиелар һаны 18854 берәмек булһа, 73277 кеше шәхси эшҡыуар булараҡ теркәлгән.

Былтыр бәләкәй эшҡыуарлыҡ субъекттары тарафынан 13 миллиард һумға яҡын тауар етештерелгән һәм хеҙмәттәр күрһәтелгән. 1999 йылда был һан 9,4 миллиард һум тәшкил иткән. Бюджет һәм бюджеттан тыш фондтарға алынған килемдең 10 проценты (4 миллиард һумдан ашыу) күләмендә аҡса күсерелгән.

Башҡортостан Республикаһының Тышҡы бәйләнештәр һәм сауҙа министры урынбаҫары Роберт Ваһапов һүҙҙәренә ҡарағанда, былтыр бәләкәй эшҡыуарлыҡҡа булған ҡараш ыңғай яҡҡа үҙгәрә башлаған. Элегерәк был ҡатламға ҡарата кире мөнәсәбәт өҫтөнлөк итте. Был эшкә лә ныҡ ҡамасауланы. Бөгөн эшҡыуарҙарҙы иҡтисадтың өҫтәмә секторы итеп ҡарайбыҙ, һәм был ысынында шулай. Хәҙер ҡайһы ғына тармаҡты алып ҡарама, унда төп производствоға ныҡлы терәк булған бәләкәй эшҡыуарлыҡ структуралары эшләй. Мәҫәлән, әле республикабыҙҙа эшҡыуарҙарҙың 22 проценты ауыл хужалығында, 17 проценты төҙөлөштә, 12 проценты сәнәғәттә, 36 проценты сауҙала, 7 проценты көнкүреш хеҙмәттәре күрһәтеү өлкәһендә мәшғүл. Бынан тыш медицина, мәғариф һәм башҡа тармаҡтарҙа ла бәләкәй эшҡыуарлыҡ әүҙемләшә. Былтыр бәләкәй эшҡыуарлыҡты яҡлау һәм үҫтереүгә республика бюджетынан 12,5 миллион һум аҡса бүлеү ҡаралһа, шуның 8,7 миллион һумы күсерелгән. 1999 йылда был күрһәткес 4,7 миллион һум кимәлендә булған. Бында тағы бер нәмәгә иғтибарҙы йүнәлтке килә. Былтыр урындағы бюджеттарҙан ошо өлкәне үҫтереүгә 1,8 миллиард һум аҡса бүленгән. Быйыл был сумма 20,7 миллиард һум күләмендә ҡаралған. Был бигерәк тә ҡыуаныслы, сөнки бәләкәй эшҡыуарлыҡ урындарҙа үҫешергә тейеш, уның проблемалары тәғәйен ҡала йәки район хакимиәте ярҙамында хәл ителә. Нимә етмәгәнен, нисек үҫешергә икәнен тик урындарҙағы власть органдары ғына белә.

Быйыл бәләкәй эшҡыуарлыҡ структураларын үҫтереүгә дөйөм



08-2001.p65 61 21.08.01, 11:12
Black

алғанда 60 миллион һумға яҡын аҡса ҡаралған. Шуның 12,5 миллион һумы 2001 йылда Дәүләт программаһын үтәүгә тәғәйенләнһә, 47 миллион һумы приоритетлы йүнәлештәрҙә эшләгән субъекттар эшен әүҙемләштереүгә тотоноласаҡ. Былтыр бәләкәй эшҡыуарлыҡты яҡлау һәм үҫтереү буйынса Дәүләт программаһын тормошҡа ашырыу буйынса 43 сара планлаштырылһа, шуның 41-е үтәлгән. Ҡалған икәүһе — бәләкәй эшҡыуарлыҡ структуралары өсөн маркетинг үҙәге һәм инновацион-технологик үҙәк ойоштороу — сараларҙы бойомға ашырыусылар (Фән, юғары һәм урта профессиональ белем биреү буйынса дәүләт комитеты менән Сәнәғәт сәйәсәте буйынса дәүләт комитеты) яғынан инициатива булмау һәм башҡа сәбәптәр арҡаһында әлегә ҡалдырып торолған. Әммә был улар бөтөнләйгә төшөп ҡалды тигәнде аңлатмай, ошо ике пункт быйылға күсерелде һәм бойомға ашасаҡ. Ҡала һәм районлар хакимиәттәре араһында бәләкәй эшҡыуарлыҡты үҫтереүгә йүнәлтелгән эш алып барыу республика конкурсы һөҙөмтәләре буйынса Октябрьский, Кумертау ҡалалары, Бәләбәй ҡалаһы һәм районы, Йәрмәкәй, Баҡалы, Илеш райондары иң яҡшылары тип табылды. Билдәле булыуынса, былтыр 19 районда бәләкәй эшҡыуарлыҡты үҫтереү буйынса льготалар биреү ҡаралғайны. Был сара бик ваҡытлы һәм кәрәкле булып сыҡты. Ошо райондарҙың барыһында ла тиерлек эшҡыуарлыҡ йәнләнде.

Башҡортостан Министрҙар Кабинетының тышҡы бәйләнештәр һәм баҙар инфраструктураһын координациялау бүлеге мөдире етәксеһе Валерий Вәлиәхмәтов һөйләүенсә, бүлек барлыҡ хужалыҡ итеү тармаҡтарында ла бәләкәй эшҡыуарлыҡҡа башҡа структураларҙа булған кеүек ҡараш булдырыу, эшҡыуарлыҡ структуралары һәм хөкүмәт араһындағы бәйләнеште нығытыу, координациялау менән шөғөлләнә. Бынан тыш бәләкәй предприятиелар ҙур етештереү берекмәләре эргәһендә ярҙамсы изделиелар эшләүҙе үҙ өҫтөнә алып, производствоны тиҙләтеү һәм продукцияның сифатын күтәреүгә булышлыҡ итеүен ойоштороу буйынса ла эш алып барыла. Сит илдәрҙә бындай тәжрибә күптән ҡулланыла. Мәҫәлән, завод автомобилдәр эшләү менән шөғөлләнә икән, уның эргәһендә эшләгән (уларҙың һаны 200-гә етеүе мөмкин) бәләкәй предприятиелар береһе тәгәрмәс йыйыуҙы, икенсеһе кабинаны йыһазлауҙы, өсөнсөһө ултырғыстар етештереүҙе башҡара. Икенсе төрлө әйткәндә, улар технологик сылбырҙа ҡатнаша. Ҡорамалдарҙы әлегә лизингка алып эшләргә мөмкин буласаҡ. Бында эшҡыуарҙар бәләкәй эшҡыуарлыҡты үҫтереү фонды ярҙамына ла таяна ала. Етештереү-сервис комплекстары булдырыу менән дә ҡыҙыҡһына бүлек. Төркиәлә бындай тәжрибә бар. Унда бер ҡыйыҡ аҫтына тупланған 35-40 бәләкәй предприятие халыҡ ҡулланышы тауарҙары етештереү, төрлө хеҙмәттәр күрһәтеү менән шөғөлләнә.

Эшҡыуарҙарҙың үҙҙәренең һәм үрҙә телгә алынған фондтың финанстарын йәлеп итеп, ошондай комплекстарҙы Башҡортостанда ла эшләтеп ебәрергә иҫәптәре. Әлбиттә, эш башлаған осорҙа эшҡыуарҙарға льготалар ҡараласаҡ тип күҙаллана. Валерий Ғәлиәскәр улы әйтеүенсә, Башҡортостанда йәшәүселәр шул уҡ Ҡытай һәм Төркиә халҡынан бер ере менән дә кәм түгел. Шулай булғас, ниңә Америка джинсыларын, Төркиә тундарын, Италия итектәрен үҙебеҙҙә етештермәҫкә? Шарттар булдырғанда эшкә тотоноусы табыласаҡ. Хөкүмәт кимәлендә был фекер яҡлау тапҡан һәм әле уны тормошҡа ашырыу буйынса эш алып барыла. Ошондай беренсе комплекс төҙөүгә тотонғандар. Ул элекке чертеж приборҙары заводы бинаһында урынлашҡан. Әле 23 бәләкәй предприятие производство ойошторған. Бында етештерелгән продукцияның ҡайһылары уникаль һанала. Әлегә һыу таҙартыу ҡоролмаларынан башлап, юл знактары, мебель, сауҙа кәрәк-ярағына тиклем эшләп сығаралар. Предприятиелар һанын артабан да үҫтереү маҡ-



08-2001.p65 62 21.08.01, 11:12
Black

саты бар. Яҡын киләсәктә уларҙы район һәм ҡалаларҙа ла күрә башлаясаҡбыҙ. Республикабыҙҙа ошондай комплекстарҙы ойоштороу буйынса Президент программаһы әҙерләнә һәм законлы нигеҙ булыу менән эш йәнләнәсәк.

Былтыр эшҡыуарҙарҙың райондар буйынса үткән семинарҙары булды. Өс сығыуҙа улар 18 районды ураны. Һөҙөмтә булараҡ Өфө ҡалаһында «Руком» компаниялары төркөмө төҙөлгән (Асҡын, Мишкә районларында ит сеймалы әҙерләү менән шөғөлләнәләр), Ғафури, Салауат райондарында «Лотос» химик таҙартыу предприятиеһының филиалдары, Ишембайҙа «Эшлекле костюм» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәтенең тегеү цехы асылған, Мишкә районында «Эсфорт» автосервисының автомобилдәрҙе хеҙмәтләндереү предприятиеһы эшкә тотонған, Салауат ҡалаһының «Бип» предприятиеһы «Баймаҡмебель» менән берлектә мебель етештерә башлаған, «Камелия» үҙәге «Красноусол» саноторийында парикмахер салоны асҡан, Благовещенск ҡалаһында «Витадент»тың филиалы эшләй, «Роза ветров» компанияһы Белоретта спорт тауарҙары магазины ойошторған, шул уҡ ҡалала «Леко» аптекаһы филиалы асылған. «Прополис», «Аюрверда» йәмғиәттәре етештергән продукцияны хәҙер Мишкә, Асҡын, Балтас, Салауат райондары халҡы һатып ала, сөнки уларҙа махсус магазиндар булдырылған. «Ғәлиә» Италия технологияһы буйынса химик таҙартыу предприятиеһы үҙ филиалдарын Белорет, Ишембай ҡалаларында ойошторған. «Салауат» предприятиеһы Мишкә, Балтас, Асҡын райондарындары эшҡыуарҙар менән берлектә ҡиммәтле тиреләрҙән продукция етештерә башлаған һ.б. Бынан тыш семинарҙар күп кенә ҡала, район хакимиәттәре башлыҡтарының бәләкәй эшҡыуарлыҡҡа ҡарашын ҡырҡа үҙгәртеүгә лә булышлыҡ иткән. Роберт Фәнил улы әйтеүенсә, әгәр элек «һауырға һәм ашатмаҫҡа» принцибы өҫтөнлөк итһә, хәҙер күбеһе «ашат, шунан һуң ғына һау» тәғлимәтенә таянып эш итә башлаған. Килешеүҙәр, эшлекле бәйләнештәр, тәжрибә өйрәнеү, райондарҙан килгән вәкилдәрҙе ошо предприятиеларҙа бушлай уҡытыу тураһында һөйләп тораһы ла түгел. Бер һүҙ менән әйткәндә, урындарҙа үткән осрашыуҙар кәрәкле һәм һөҙөмтәле сара. Әлегә асыҡ ҡына билдәле түгел, әммә быйыл да бындай семинарҙар үткәреү күҙаллана. Әммә уларҙы үткәреү икенсе төрлөрәк булмаҡсы.

Лизинг мәсьәләһенә килгәндә, республикабыҙҙа был һорау менән «Башсельхозтехника» предприятиеһы шөғөлләнә. Бында шулай уҡ «Башкредитбанк» эргәһендәге «Регион лизинг» һәм «Таис плюс» компанияларын да индерергә кәрәк. Был — Башҡортостанда эшләгән, лицензияһы булған ойошмалар.

Әлегә лизинг эшмәкәрлеге ҡатмарлы осор кисерә. Закондарҙың камил булмауы арҡаһында лизинг компанияһы кешенән йәки предприятиенан аманатҡа әйбер алырға тейеш (өй, машина, күсмәүсе милек һәм башҡалар). Үҙ сиратында ул техника йәки ҡорамалды файҙаланыуға бирер алдынан банктан ссуда алырға мәжбүр. Ә лизингка алынған техниканы аманат итеп һалып булмай. Шул арҡала банк та, компания ла барыһын да хеҙмәтләндерә алмай. Яңы техника һатып алыр өсөн дә, лизингка алырға ла эшҡыуарлыҡ субъекттарының мөмкинселеге юк. Билдәле булыуынса, техника, ҡорамалдар бик кәрәк, айырыуса ауыл хужалығында. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, республикабыҙҙа лизинг эшләмәй тип әйтеп булмай. Техника, ҡорамалдар алғандар аҙ булһа ла, бар. Был турала мәғлүмәт һәм реаль ярҙам алырға теләүселәрҙә теләк һәм тырышлыҡ ҡына булырға тейеш.



08-2001.p65 63 21.08.01, 11:12
Black